Әбйәлилдә

сығарылған элекке йырҙар

## О Р С О К

Орсок йыры, үҙенең исеме үк әйтеп торғанса,эш йыры. Уның сығышы ла орсок иләүгә бәйләнгән һәм уның башкарылышы бик үҙенсәлекле: йыр орсок иләүҙе һынландырып башкарыла.

Орсок йырының сығышы тураһында Әбйәлил районының Ташбулат ауылында йәшәүсе Ғәлләм Хисмәтов былай тип һөйләне.

"Оләсәйемдең йыры был. Исеме Вазифа оләсәйемдең.Мин әле бәләкәй инем.Олатайым гусар булып йөрөй бит инде.Ул күп йылдар буйы кайтмай әлеге оҙак хеҙмәтенән батшаның. Әбейе ғүмер буйы көтөп, орсоғо менән тик ултыра.Сәсәнерәк әбей ине инде ул. Орсок иләп ултырғанда йырҙап тик ултыра икән был. Үҙенән сығарып инде.Аның улының улы мин йөрөп ултырған булам югереп. Иәтиммен үҙем. "Бер иҫкә төшөрөп йырҙарһығыҙ әле", тип йырҙай торғайны оләсәйем шул йырын. Үҙе 1925 йылда 92 йәшендә үлеп китте.Шул, үлер алдынан,мин оләсәйем аслыктан үлеп бара икән тип, ауыҙына икмәк сәйнәп тыктым. Бер генә яраткан оләсәйем бит инде.Аҙак, үҙе үлгәс, ауыҙындағы икмәкте орсоғо менән сокоп сығарҙылар.Байтак вакыт үтте инде хәҙер.Калдырған мираҫы шул орсок йыры инде. Һаман да әле онотмай йырҙайҙар шуны кыҙык итеп".

- Тарихе унын шулай,- тигэс,Ғэлләм Хисмәтов Орсок йырын бөтә хәрәкәттәре менән бик оҫта итеп йырлап күрһәтте:

"Колғаларға бәйҙәп, йөн иләйем,
Әллә ниңә, әллә ниңә
Иөндәрем ырамай.
Күрешегә генә коҙа килгән
Әллә ниңә, әллә ниңә
Мине лә һорамай".

"Колғаларға бәйҙәп йөн иләйем"... тигәндә уң кул бармактары "орсокто әйөрәлтәп" артка ебәрелә һәм, алға килтереп, һул кул менән колғанан, "йөндө йолокандай" һуңынан "Әллә ниңә, әллә ниңә"... тигән һайын ике мәртәбә "епкә тәкерәләп" алына һәм "орсок" тағы ла артка китә... Йыр һәр сак шулай орсок иләү хәрәкәттәре менән башкарыла.

Орсок йырының һуңғы икеһе Рәхмәт ауылының йыр сығарыусыһы Зөләйхә Кәшәфетдинованан 1904 йылғы/ яҙып алынды, тәүге өс йырын Ғәлләм Хисмәтов йырланы.

13,14 августа, 1952 йыл.

Орсок йыры
---------

Колғаларға бәйҙәп, йөн иләйем,
Әллә ниңә,әллә ниңә
йөндәрем ырамай.
Күрешегә генә коҙа килгән
Әллә ниңә, әллә ниңә
мине лә һорамай.

Иәшел күкте, балдар, сапанымды
Яғаһынан, яғаһынан
    тотоп та элегеҙ.
Әйткән васыятымды, балдар, һеҙ белегеҙ:
Сапанымды, сапанымды
    фидиәмә бирегеҙ.
Әй илебеҙ беҙҙең, әй илебеҙ,
Илебеҙҙән, илебеҙҙән
    артык та еребеҙ.
Аяҙ көндә сыуак әй вакытта
Орсок иләй, орсок иләй
    торған да көнөбөҙ.

Уң беләкәйҙәремде талдыра шул
Орсок кына, орсок кына
    менән дә орсок баш.
Иөйрәкәйҙәремде яндырған шул
Үҙгенәйем, үҙгенәйем
    менән дә имсәктәш.

Әй хәлем юк, минең хәлем юк шул,
Әллә ниңә, әллә ниңә
    минең дә хәлем юк.
Үлгән сакта шаһит үлеп китһәм,
Фидиәмә, фидиәмә
    бирер ҙә малым юк.